## *Намыҫ*

(Әхтәм Абушахмановҡа)

Шулай булыуын мин яҡшы беләм
Бөгөн генә түгел,
Борон да:
Баһаланһа
Кеше сифаттары
Һүҙ башланған намыҫ турында.
Ә шулай ҙа намыҫынан ерҙә
Уңғанмы күп, әллә туңғанмы?
...Намыҫ менән һатыу итмәй, тибеҙ...
Әммә уны  һатып алыр кеше булғанмы?

Риф Тойғон

Бар тереклек күркәм яҙҙы ҡаршылаған  мәлдә яҡташыбыҙ, БР Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе (1999), Рәсәйҙең Театр эшмәкәрҙәре союзы секретары (2001), З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы доценты, Рәсәйҙең атҡаҙанған(1989), Башҡортостандың халыҡ (1984), атҡаҙанған(1972) артисы, Салауат Юлаев исемендәге орден кавалеры (2019), Салауат Юлаев исемендәге дәүләт (1983), Ким Әхмәтйәнов исемендәге район премияһы лауреаты(2005) Әхтәм Әхәт улы Абушахманов ил ағаһы булырлыҡ ғүмер үрен артылды.

1948 йылдың 10 мартында Әбйәлил районының Боранғол ауылында тыуып үҫә. Ойоштороу һәләтенә эйә булған, тирә-яҡ ауыл йәштәре араһында абруй ҡаҙанған  егет VIII кластан һуң киномеханик булып хеҙмәт юлын башлай. Артабан клуб мөдире, комсорг итеп тәғәйенләнә. Йәштәрҙе йыйып спектаклдәр, тамашалар ойоштороған, сәхнәлә үҙен килешле тота белгән бәһлеүән кәүҙәле егет Өфө сәнғәт училищеһының 2 курсына уҡырға саҡырыла. Башҡорт театры күгендәге йондоҙҙарҙың береһе бына шулай ҡабына.

- Һәр роленә үҙ ҡарашы булыуы менән башҡаларҙан айырылып торҙо.

БР атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт  сәнғәт академияһы профессоры Фәдүнә Ҡасимова

- Әхтәм Салауатты, ә мин Гөлнәзирәне уйнаныҡ. Көслө рухы менән барлыҡ шик-шөбһәләрҙе юҡҡа сығарҙы һәм шуның менән беҙҙе лә, үҙенән шаҡтай өлкән артистарҙы ла артынан эйәртте...

СССР-зың халыҡ артисткаһы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Гөлли Мөбәрәкова.

- Бер заман театрға мөһабәт  кәүҙәле егет  инеп килә. Үҙемдең дә дәү саҡ. Сағыштырып ҡараным да, баһадирыраҡ, көслөрәк тип ҡуйҙым. Ә бергә эшләй башлағас инде, унан да ышаныслыраҡ иптәште, партнерҙы тапманым...

Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фидан Ғафаров.

## Телефильмдағы образдары:

Билдәле актер халыҡҡа кино сәнғәте
аша ла яҡшы таныш.

- **Ҡаҙағстан студияһы рус телендә эшләгән “Ала тауҙың көмөш мөгөҙө” фильмында төп ролде – Ҡайсарҙы – ижад итте.** (Кайсар. «Серебряный рог Алатау», Казахфильм, 1978)

## Башҡорт телефильмдары:

- **“Кинйә”** телефильмындағы Һатлыҡ образы (Сатлык. «Кинзя», Баштелефильм, 1988)
- **“Һарыҡолаҡ”** телефильмындағы Һиммәт образы (Химмет «Желтоухлий», Баштелефильм, 1990)
- **“Башҡорт туйы”** телефильмдарындағы геройҙары ла тамашасы хәтерендә мәңгегә ҡалды.
- 200-ҙән күберәк кинофильмды башҡортсаға тәржемә итеүгә һалған көсө лә эҙһеҙ үтмәне.
- Ә инде Башҡортостан телевидениеһында һәм радиоһында һаҡланған яҙмалары уларҙың алтын фондын тәшкил итә.

БР халыҡ артисы Әхтәм Абушахманов күптәр донъяларын онотоп ҡараған һоҡланғыс образдарҙы бихисап ижад итте. Ул утыҙ йыллыҡ ижади эше осоронда тыуҙырған образдарҙы һанап сығыуы ла ауыр.

## Сәхнәләге образдары:

- ***Парис («Ромео и Джульетта»,*** У.Шекспир),
- ***Сазрый («Онотма мине, кояш!»*** А.Абдуллин),
- ***Салауат («Салауат». Өн аралаш ете төш”,*** М. Карим),
- ***Көс («Ташлама утты, Прометей!»,*** М.Карим),
- ***Акъегет («Ай тотолған төндә»,*** М.Карим),
- ***Һалдат («Әсәләр көтәләр улдарын»,*** А.Мирзаһитов),
- ***Карагол («Карагол»,*** Д.Юлтый),
- ***Краснов*** *(«Грех да беда на кого не живет»,* А.Островский),
- ***Любовник («Их четверо»,*** Г. Запольской),
- ***Кәрим Хәкимов («Ҡыҙыл паша»,*** Н.Асанбаев),
- ***Токтамыш Хан («Иҙеүкәй менән Мораҙым»,*** М.Бурангулов),
- ***Юсов («Доходное место»*** А.Островский),
- ***Отелло («Отелло»*** Шекспир),
- ***Кодар («Легенда о любви»,*** Г.Мусрепов).
- ***Коҙар” (Мөхәббәт һәм нәфрәт”,*** *З.Биишева)*
- ***“Онотолған әҙәм”*** (Н.Хикмәт)
- ***“Әсәләр көтәләр улдарын”*** (Ә. Мирзаһитов)

## *Караташ ҡаяһында*

***Әхтәм Әбүшаһмановҡа***

Әйҙә, киттек, Әхтәм, Ҡырҡтытауға –
Беҙҙең йәшлегебеҙ иленә:
Үткәндәрҙе иҫләп бер йөрөйөк,
Биләндәрҙең баҫып биленә.

Үтәйек беҙ уяларҙы ярып,
Упҡындарҙы һикереп уҙайыҡ,
Упҡындарға инде ҡоламабыҙ:
Беҙ хәҙер – сос, уяу, беҙ – айыҡ.

Үҙәк-үҙәк, армыт-армыт аша
Үрләйек беҙ, әйҙә, юғары –
Тауҙарҙан да юғарыраҡ ашҡан
Бейеклектәр беҙҙә юҡ әле!

Менәйек беҙ, Әхтәм, Караташҡа –
Күк көмбәҙен тишкән ҡаяға,
Шул ҡаянан ҡарап бер торайыҡ,
Уйҙар китһен әллә ҡайҙарға.

Уйҙар илтһен беҙҙе йәш саҡтарға,
Уйҙар илтһен алыҫ-алыҫҡа...
Ҡая-таулы яҡтан йәшләй генә
Беҙ сыҡтыҡ бит йәшәү-алышҡа.

***Әсхәл Әхмәт - Хужа***

Яҡташ артисыбыҙ Әхтәм Әбүшахманов Башҡорт дәүләт академия драма театр сәхнәһендә Мостай Кәримдең “Салауат” трагедияһының Салауат образын юғары кимәлдә уйнауы менән тамашасылар күңелендә, башҡорт сәнғәте тарихында лайыҡлы урын алһа, исеме Рәсәйҙән ситтә лә билдәле артист, Нәжиб Асанбаевтың “Ҡыҙыл паша” драмаһының төп геройы – дипломат Кәрим Хәкимов ролен башҡарыу оҫталығы менән Мәскәү, Йемен Халыҡ Республикаһы тамашасыларын әсир итте. Юғары художестволы образдар тыуҙырғаны өсөн яҡташыбыҙға Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә.



Артист Нәжиб Асанбаевтың ***“Ҡыҙыл паша”*** драмаһының төп геройы – дипломат Кәрим Хәкимов ролендә.



Артист М.Кәримдең ***“Салауат”*** трагедияһында Салауат образында.

МБУК «Центральная районная библиотека»
МР Абзелиловский район РБ
Методико – библиографический отдел.

# “Театрҙа уның булмышы”



## Абушахманов
## Әхтәм Әхәт улына 75 йәш

**Башҡортостан Республикаһының Халыҡ артисы**

*Библиография бүлеге, Асҡар 2023.*